**ФГБНУ Уфимский федеральный исследовательский центр Российской академии наук**
**Научный архив и Научная библиотека**
**ГБУК Национальная библиотека им. А.-З. Валиди Республики Башкортостан**
**Отдел рукописей и редких изданий**



**Выставка посвящается к 140-летию со дня рождения башкирского поэта-импровизатора, сэсэна**

# Валиуллы Кулумбетова

**Вәлиулла Фәйзулла улы Ҡоломбәтов**

(1881 — 1964) — башҡорт импровизатор-шағиры, сәсән.

1881 йылда Өфө губернаһының Стәрлетамаҡ өйәҙе Яҡтыкүл ауылында (хәҙер Башҡортостан Республикаһының Ғафури районы) тыуған.



Бер заманда тыуып үҫкән , йәшләй дуҫ булған Мәжит Ғафури менән тормош , уҡыу йылдары ла тығыҙ үрелеп бара. Иҫке Ҡыйышҡы мәҙрәсәһендә , Өфөнөң “Ғәлиә” мәҙрәсәһендә лә бергәләп уҡып йөрөйҙәр. Улар менән Бәҙретдин Мәҡсүтов исемле өсөнсө дуҫтары ла була. Улар алтын приискыһында ла бергәләп эшләйҙәр. Шулай уҡ «Рәсүлиә» мәҙрәсәһендә лә белем ала.

Вәлиулла бик отҡор була, мәҙрәсәлә яҡшы уҡый, хатта хәлфәләр уға дәрес үткәрергә рөхсәт итәләр. Тик ул белем алып сыҡҡас, имам булып эшләүгә күңеле риза булмай, башҡорт балаларына дин белеме менән бергә арифметика, рус теле, туған тел дәрестәре уҡытҡан уҡытыусы булып эш башлай һәм ошо изге эшенә ғүмере буйына тоғро ҡала. Ғафури районында тәүге мәғариф етәкселәренең береһе була. Яңы ҡоролошто ҡабул итә. Шулай уҡ ул дингә ҡаршы аяуһыҙ көрәш барған саҡта ла ауыл тирәһендә Ҡөрьән аяттарын уҡыусы була, алтын урталыҡты һаҡлай. Замананың алдынғы ҡарашлы улы булып ҡала.



Вәлиулла Ҡоломбәтов «Иптәшкә», «Үткер балта», «Ялҡау Мотой менән тараҡандар» шиғырҙары, шулай уҡ йырҙар авторы. Сәсәндең әҫәрҙәре коллективлаштырыуға, Бөйөк Ватан һуғышына, әҙәп һәм социаль мөнәсәбәттәргә бағышланған. Балалар өсөн экиәттәр һәм Мәжит Ғафури тураһында иҫтәлектәр яҙа.

Вәлиулла Фәйзулла улы башҡорт фольклоры һәм этнографияһы буйынса материалдар йыя, шул иҫәптән Салауат Юлаев тураһында риүәйәттәр — «Салауаттың ҡатынына йыры», «Боғрахан (Карахан)», уның «Бүгәсәүгә ҡушылып, кушма ирбатырға булып…» ҡобайыры, Аҡмулла шиғырҙарын һәм башҡалар.

Сәсәндең ҡайһы бер әҫәрҙәре һәм ул яҙып алған риүәйәттәре «Башҡорт халыҡ ижады» йыйынтығына индерелде. Уның әҫәрҙәренең байтаҡ өлөшө юғалған. Вәлиулла Ҡоломбәтовтың ҡулъяҙмалары РФА Өфө федераль-тикшеренеүҙәр үҙәгенең Ғилми архивында һаҡлана.






***Вәлиулла Коломбәтов (1881—1964)***

Вәлиулла Фәйзулла улы Коломбәтов 1881 йылда хәҙерге Ғафури районы Яктыкүл ауылында ярлы крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. Мәжит Ғафури менән бергә Ҡыйышҡы, Троицк, «Ғәлиә» мәҙрәсәләрендә уҡыған, ауылда балалар уҡытҡан, алтын приисктарында эшләгән. Октябрь революцияһы һәм граждандар һуғышы осоронда совет яклылар сафында булған, башында В. И. Ленин торған большевиктар партияһының һәм Совет хөкүмәтенең милли һәм экономик политикаһын аңлатыуҙа әүҙемлек күрһәткән һәм халыкта «большевик хәлфә» булып танылған. Егерменсе йылдарҙа уҡытыусы, В. Коломбәтов үҙ ауылында колхоз төҙөүҙә ҡатнашҡан, ҡартайып үлгәнсе колхоз ағзаһы булып торған.

В. Ф. Коломбәтов ғүмере буйына халыҡ ижады, уның ғөрөф һәм йолалары менән ҡыҙыҡһынған, ишеткән күргәндәрен яҙып ала барған. Ҡобайырҙар, әкиәттәр, легендалар, йырҙар, мәҡәлдәр, йола фольклоры, ҡыҙыҡлы тарихи һәм этнографик материалдар, Салауат Юлаев ижадына ҡарағанды шиғырҙар, йырҙар һәм легендалар, Аҡмулла шиғырҙары, дуҫы Мәжит Ғафури тураһындағы иҫтәлектәр һәм шуның ук үҙе ижад иткән әҫәрҙәре лә теркәлгән дәфтәрҙәрҙе ул, 1950 йылда, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтына тапшырылған.— FA, ф. 3, оп. 12/261, 205 кәҙ. Ҡульяҙмалар ғөрәпсә.

Томды әҙерләү мәлендә (1980 йылда) сәсәндең Архангель районы Архангельский поселкаһында йәшәүсе ҡыҙы Мөнирә Коломбәтованан тағы байтаҡ ҡына ҡульяҙмалар алынды. Былар шул уҡ фондта иңгән әҫәрҙәрҙең айырым биттәргә башлыса ҡәләм менән яҙылған ҡараламалары һәм 94 битлек ҡалын дәфтәргә ҡара менән таҙа күсермәһе булып сыҡты.— FA, ф. 3, оп. 73/20.

**Ялҡау Мотой менән тараҡандар.**— FA, ф. 3, оп. 12/261, 128-се бит; ф. 3, оп. 73/20, 14—16-сы биттәр.

**Интоника.**— FA, ф. 3, оп. 12/261, 115-се бит; икенсе дәфтәрендә «Шағыр менән нәсихәтә» тип аталған.— ф. 3, оп. 73/20, 9-сы бит.

**Үткер балта.**— FA, ф. 3, оп. 12/261, 186-сы бит; икенсе дәфтәрендә 45-се бит.

### ЯЛҠАУ МОТОЙ МЕНӘН ТАРАҠАНДАР

Борон-борон заманда бер ҡарт булған,
Эш билбауын биленә тағы быуған.

Бабайҙың йәш бисәһенән бер ул тыуған,
Был улының исеме ялҡау Мотой булған.

Бабай үҙе йәш сағында ярлы торған,
Йоҡлағанда ябынырға булмаған юрған.

Ҡарт, күп эшләп, байлыҡ менән бәхет тапҡан,
Тырышып эшләп, өҫтөнә юрған япҡан.

Эшләргә бабай үҙе яҡшы булған,
Яҡшылығы менән уның донъя тулған.

Малһыҙҙарға орлоҡ өсөн малдар биргән,
Игенһеҙҙең итәгенә бөрсәк тиргән.

Ҡарт донъяла күп эшләгән, күпте күргән,
Башҡаларға эше менән үрнәк биргән.

Эшһеҙ ятып бабай үҙе һис тынмаған,
Эшләмәй торған саҡта йөрәге ныҡ һыҙлаған.

Малдарын туйҙырып, бабай аҙбар көрәп тора,
Ялҡау Мотой үҙ белгәнен был бабайға һөйләп тора.

— Етер, ҡарт,— ти,— күп эшләмә, ҡулың талыр,
Үлерһең, һинән малың тороп ҡалыр.

Ҡарт әйтә: «Донъяла етеҙлек даным ҡалһын,
Үлгәндән һуң халыҡ өсөн малым ҡалһын.

Иҫкә алырҙар етеҙлек даны менән,
Шатланырҙар ирҙең ҡалған малы менән».



Алтмыш йәштә ғүмере бөтөп, бабай үлгән.
Мал алырға туғандары килеп тулған.

Ҡарт үлеп, ялҡау Мотой йәтим ҡалған,
Атаһынан ҡалған малды ҡулға алған.

Ялҡау Мотой үҫеп, егет булып етте,
Эшләмәгәс, ҡулынан бер ҙә ҡалмай бәхет китте.

Әсәһе әйтә: «Балам, Мотой, ҡулыңдан бәхетең китте,
Бәхет эҙләп табырға һиңә инде ваҡыт етте».

Бәхет бөткәс, мейе тоноп, йөрәк һыҙлап,
Мотой менде мейес башына бәхет эҙләп.

Мотой күрҙе: мейес башында ишәйгән тараҡандар,
Иҫкә алды тота белмәй малдарын таратҡанды.

Мотой менеп мейес башына һуҙылып ятты,
Өҫтөнә иҫке ятҡан тунын япты.

Мейес башында тараҡанға, енкә баулап, икмәк элде,
Миллионлаған тараҡанды ялҡау Мотой бәхет күрҙе.

Мотой мәшһүр ялҡаулыҡ исемен алды,
Бәхет тиеп тараҡанды, шунда ҡалды.

Ялҡауҙарға мейес башында булған тәхет,—
Халыҡтарға тараҡандар түгел бәхет.

### ИПТӘШКӘ

Бара торған һәр юлыңда дошманыңдан кәртә бар,
Меңгән атың саптарыңды тоғро юлға тарта бар.
Төрлө яҡҡа күҙ һалып бар, китмә һин юлдан сығып,
Ҡыҫҡараҡ тот теҙгенеңде, китмәһен өркөп, йығып.
Юрғалатып саптарыңды, юлда туҙан туҙҙырып,
Тиҙ етәрһең маҡсатыңа, башҡаларҙан уҙҙырып.

*1923*

### ҮТКЕР БАЛТА

Балта үткер — үҙенә һап яһай алмай,
Ҙур белемле ирҙәр ҙә кешеһеҙ йәшәй алмай.
Берлек кәрәк донъябыҙҙа тереклек өсөн,
Күмәкләгән яу ҡайтарған шуның өсөн.
Берләшкән әҙәмдәрҙе бүре алмай,
Тормошоң алға китһә, дошмандарың күрә алмай.

*1949*



Фонд №

Фонд № 3

Опись № 5

Ед. хр. № 179

...ИЯ НАУК СС...

...СКИЙ ФИЛИАЛ

...чный архив

(полное название учреждения)

ДЕЛО №

...№

Вәли Кулумбетов

Кулъязмалар

1951

Начато: " " 197 г.

Окончено: " " 197 .

на 200 листах

хранить пост лет (по перечню ст. № )




Ф.3. Оп. 5 д. 238.
Вәлиулла Ҡолонбәтов
дәфтәре


Салауат батыр йырҙары.
1952 г.
Өсөнсө дәфтәр.
(Кәләм м-н яҙылған,
бөтәһе 10 бит).


Ҡобайырҙар.
Дүртенсе дәфтәр
(айырым биттә)
Бөтәһе 10 кәҙ.

35

-١-

( قەرغەشتە يوق قوڭبۇڭ ياتاتۇرالدا )

( قوبايىرداز )

ياتاتۇرقتاردا ياتا يەش ھالقتار

گۇرلەپ ئىشلەپ ياتا ئۇرالدا

يەتيوقە قىير بولغان يەشە بالالار

بوشقايو رمەي حەدزئۇرامدا

مەنسەپلەرگە باروپ ئالار ئوقوپ

تورلۇقە نلەر مەن تانشوپ

ياتا زوقتار عائشەدە بارب

ئىشتەر ئىشلەر ئالار يارشوپ

*

خاي ئورالكھين ياتا ئورال

گۇرلەپ ئوتەن تورغان ئيلىغە

باياقتارك بولغن قورال

*

خاي ئورالوم ئورالوم

خينك تووب خينك ئوتەك

ئولاتايدر ئاتايدر

خيتا ئيلوپ يىتى لەر

گوساك باتر ئيرلەر دەك

ئيل عاشق بولغان ئاعايدر

*

خاي ئورالوم، ئورالوم

يەش حالقتار تابارئيدلەپ

ھەر ئاز يناك بارث

گويا خيتا قوش قوندرماي

گوساك باتر شوتقارك

*

-١- ( سالاوات باتر بوداريب )

[illegible]

[illegible]

[illegible]

[illegible] بالقيتارب

ئىشلەپ [illegible] يالقتا

[illegible]

[illegible]

[illegible]

[illegible]

باق ياعينا [illegible]

بوگەسە وتيەن بر باتر

يەمەلگە تيەن بر باتر

سال بويتقمى سامقلراب

يانغان ئورتەي يالقناپ

ھالقتا مۇراد تاشلاعان

ياليپنا حساب تاشلاعان

تاوذازدى ئوتكەن بل حيتاب

موذازدى يىشتەن بل حيتاب

بوگەسە وباتر يانينا

ەسلەر يىلغەن حيساب

ئيسەرلەپ ئاتقا منبەندرەم

بيلينە قلس ئىلگەندە

بوگەسە وتيەن ئول باتر

يەمەلگە تيەن ئول باتر

ئارسلانداي ئاز غوروپ

يولندا قوروب ياندريب

توروقى منەن باتشانك

باياريب منەن باتشانك

بايذاريب منەن باتشانك

ھاناتى منەن باتشانك

ئالقىتا ئاتش باتشلاعان

دوشتارن بيعان بوگەسە و

دوشمانون قرعان بولەسە و

گورعشتا ئالعان دان منەن

يايقتا يتەن بولەسە و

ئاللاعا ئوتش تامەرذى ئا

ئول ميتە حەبە ريبەرلەك

بعاولينك قولوناك

بعاوونا يولقام تيەن ئول

تشاولساك ئاياغوناك

تشاوف يولقام تيەن ئول

برتقد قالغان ئاتشتى دقا

تيرك قايتار تيەن ئول








99
- 28 -


DƏFTƏR
ТЕТРАДЬ
Вәли Кулумбетов
1 – 19 стр



В. Коломбетов. Өлкә мәгариф бүлегендә эшләп йөрегән сагында.



8

حالق يرذارى

توت قولوڭا ملتق ئەى خلقم ،
ئاللارڭناڭ دوشمان ئۇذماقن ،
دوشمان منن كورەشە يلوك توسوت ،
يەش عومرڭنڭ زايا ئۇذماقت .

حالق يرذارى

تۇگەرەگەى كولڭ ئەى دوست ئوردەك ،
ئاتا بلمەڭ — مەرگەن ئاتوب ئال ،
مين يولاى من خدگە حالق يروث ،
ئوتعرعنا بولماڭ — ئوتوب ئال .

حالف يرذارى

ئاق ئيذل ئەى بوبيش ئەى كيڭ يالاث ،
بسە نلە نەتيە رشول بر زامات ،
بوگەما برگە ماتى لك ئيتو رەحەت ،
ئايروم يەشەولەرى شول بيك ياماث .

باشقورت حالقنارینك تیرمنغا باب بولغان بورونغى تاقماقنارى

## تاقماقنار

عومر ئیتو تویلمنی توغان تاعاب ئیشهنی ،

قاهوم خوسئوم ئوذ توغانونی یتنی بلمه‌یمه‌نهن .

بوگنقه دریّنسه‌هن له خامر باتا بیسه‌هن ،

تو بار خصغاغ خورتنارنی تونولاب باتانه سه‌هن ،

ئیرنی توکنهه ونوب یو تکره‌سروپ بوتله‌ن ئوبعه‌هن ،

بیسه‌هن بشره بلمه‌ب تیر بولغان بوتقاشن .

هاقال قاشما د به یاله‌گه‌ن قوناق توته بیسه‌هن ،

باشونا تاتنار هالونب خمذ بشه ئه‌سه‌هن ،

موت یالغان بل ئیشوکشن ئاریدانی نورهه‌سه‌توکشه ،

قیبانیناب یورگه‌ن بولك ئیهه رکلمه‌یگه‌ن موکش . موکش ـ ئه‌سوکه رهمه ،

یرذار یره‌ذب بورالا قوراب ئوینیاب قورالا ،

توتب منده‌م قورا نان بر تولپارذن ئولك تالا .

به‌یله وقورب یه‌یینده‌ تیه لیه‌ك یرذه ئوترغان ،

بااب تعولیمه‌ن ئاتناب ئسوب ئوذ قورقاقا توترغان

ئیشله‌تیمه‌ك ئیشله‌مه‌ن قوشقاج ئیشکه باعما ن

بالام یالقاو بولوذارك ئاتا ئه‌سه‌ئانه‌عه‌نه . ته‌عه‌نه ـ خورلق .

---

Вәлиулла Коломбэтов

дәфтәре.

1980 йылдың 18 февралендә

Агиш Гирфанов аша алынды (Уга Вәлиулланың кызы Мөнирә ебәргән).

Дәфтәргә В. Коломбэтнең фондында hакланган (ф. 3, оп 12/261) кулъязмаларындагы әсәрзәр ингән. Пагинацияһы минең тарафтан куйылды.

[illegible]

28 II 1980 г.

18 февраля через Агиша [illegible]


Цена 1 р. 80 к.
Продажа по цене выше обозначенной карается по закону.
Арт. № 611-48
Республиканский трест школьных письменных принадлежностей ММП РСФСР
фабрики „Светоч", Ленинград, Б. Пушкарская
Вәли Кулумбетов дәфтәре
10/VI 1950 г.
1-9 бит
ТЕТРАДЬ
по
учени
класса
школы

### خالق بەردى

سوت ەسوت تنا ئيتوب قايرب تورعاي ،
ئاق ئيغدلەرى بوييپ شول تيرەكتە ،
تورۇب ئوتكەن ئيلدك مەمبەتى ،
ئابرەم ئورشتوتا شول يورەكتە .

### خالق بەردى

يلير دەۋنە يلير يلدەر تاعا ،
يگىت ساقنا توريياي يالدورش ،
ئوكرەك ئوبىنى ئۆمەن خالدىن تاپە ،
دورش بولور تا بقان خالدىرك .

### خالق بەردى

بوگلوپىنە بوگلوپ بورلب ئاعا ،
ئاق ئيدلەرى بدك تۇعايدا ،
بوشە ئيلدەرزدە ئاتاۋقەنى كونە ،
بدلا ئيلدە كوولك ئيل تايدا .

### قشتار ئۇتوب ياز كيلدى

قووق قشتار ئوتوپ ياز كيلگەن ،
يەشتەر ئوينار سوعوپ ئوراپ امدا ،
ئوز ئيلدەرش موبتاب يازدىن قوتتاب ،
قاندوعاستار قايرار ئورالدا .
يازدارىتمەي قوشتارغەي قايراماي .
ئاسى لاعنا قووق بوراخدا ....
توعان ئيلدى ماقتاب شاتلق منەن ،
ساقرو دا كەلوك ئوراالدا ....
ئورال تاو زارينك قەي بوييوندا ،
يەشتەرقوراي ئوينار ئوييوندا ،
ئاو روكشى لەرزدە قاوعرزدا ،
يەملى تنە ئورال بوييوندا ....

### ئوتەن ئاولينك ئاللە يار باباي زلك تاقما قتار

ترمالاماي تورنالارغا سەسوب يتنەن بو رساعت ،
غيروب مين ئاشا سقنو مويار خوب ئاقغان يارساعت .
يلغاغيشوم

91 



## عیلمیم ئیزیگه یولداشیم شیعر

عیلمیم ئیزیگه یولداشیم شیعر ھەر وقت بیرگه یورەر ،
یامان ئیشلەردین قیلوداك منع ھەم تەمەد یدی قیلور ،
عیلمیم ئیزیگه یولداشیم شیعر ھەر وقت بیرگه یورەر ،
یاخشی یامان ئیشلەرگەدین یاریسا ھەم ئایروب بیرور ،
عیلمیم ئیزیگه یولداشیم شیعر ھەر وقت بیرگه یورەر ،
دوشلاردین بولغاندا دوشمان نیڭ یامان دوستنیڭ بولور ،
عیلمیم ئیزیگه یولداشیم شیعر ھەر وقت بیرگه یورەر ،
ئۆلگەنومدە ئالار ئالماس قەبرومە بیرگه کیرور ،
وە لیشوللا ، کولسیحیف ،

ئۆزەن توبگە یوزار

بیلیم کەلگەندە ... سعەت بیرتیڭ تورماق نیڭ قیمەتنی دە ... ئاشما
دنیا ماالقامدین بیدتا باربدیر عالھا قابدلیکعه زیرەر باشیب ،
ئلاسقاب قوشتالعەدە تی شول یرگە توشكەن بیموت ئاشا ماب ،
باعشق ئاتاقایلاردیك عەرەتی شول تونالاقایلار ئاسلاماب ،
قارغاید ئاعاسیم بیوك ئاعاس ئازغالا دول بیرشە ،
ئارتلاندی باتریشتە رگە باشی توبە ئیسو یلشە ،



## شاعیر ئاق مولا شیعرلەری

(مە جیمە عوم بار)

شیرنیڭ ھەمە بیلنور لەھزا ئاتسا ،
ئیمنیڭ ھالی بیلنور ... یاتسا ،
مەعریفەتکە سیغاتتقا یارەب بیسە ،
تەکیرە بیرو جیھدەدین تە جیسینی یاپسا ،
بەختوم ئاسلماعات مین بیرگە تیرە ،
ئابرویوم ئاسلماغان یوق ئیشتوم ئاقی ،
بیشدە ئەیاردان بوبولغە جەلوم بار ،
ئامانەتھەم بە عزیز بیر ... ماقی ،
تسنیفلەری باسیرلیش یارغ قیلما ...
نەفیسی ھەمیشە ئاریسن فەرق قیلغان ،
ئاداشقاندە گەر کیلوب بالغە توشکەسە ،
مین بایموش بیر قەرەمتغا ... بولغان ،
حکیمەتنی بالعەسنی قاندیب ئیکەنسە ،
دەوق سەلیم ئیسیسە بالدەب ئیکەن ،
ئازەمیڭ نەنده تی جاندیب ئیکەن ،
ولەکین مە رجانی نیڭ ئیشی باشقا ،



یلغیئلك تو لیاردین یولوزقا باشقا ،
ئاتاداشیعە عشقی بالقوب تورار ،
یولدىدا قوندرلعان ئالتن ئاشقا ،

86

- ١٥ -



مالدار تو يذ ر بابا ب تالبار كوروب تورار،

يالقاو موذى تو ذ بلمه تو ت بل بابا يعا معو يله ب تورر،

يته ر قارت كو ب تشله مه قولك تالو ــــــ،

تو له ر قهك هيسده ت تو ر ب مالك قالو ــــ،

قارت ئه يته د نياده يتذ لك دامك قالعب ــ،

توكم ندر ت هو لك هالقلار عا مالك قالعب ــ،

يشه ئالور ذار يتذ لك دا ني منه ــــ،

مثا تلا نور ذار يرذ لك قالعات مات منه ت،

تالتمش يه شتك بابا يذ لك عومر يب بوتب وفات بولغان،

مال ئالور عا توغانلارى كيلوب تو لعا ــــ،

قارت تولوب يالقاو موذى بيه تيم قالعان،

ئاتا مهيدات قالعان مالنى نيه بولوب قولعا ئالعان،

يالقاو موذى تو تب يكت بولب يتدب،

ئشله مه له سن قولنداغى بر قاليهامه به حت كيتدى،

ئه سه هعى ئه يته بالام موذى قولكلدا ئه بهخت كيتدى،

بهحت ئيذله ب تابار عا قعيكا ئيندى وقت يتدى،

بهحت بو تكه سن مدى ئو يلا ب يوره ك شعذ لاب،

موذى منذى پيسه با شيعا بهحت ئيذ له ب،

موذى كوذ ره ى پيسى با شعنه يشه ئيه ئه تو ب تار اقانورى،

يشه ئالدى تو تا بلمه ى مالدار ت ييذ تار اتقا نردى،

Рукописи

Ваня Кулембетова

Гафурийский р-н Зилим Карановский

с/совет колхоз „8е Марта"

ОБЩАЯ

ТЕТРАДЬ



-1-

Хөрмәтле иптәш Зарипов Н.Т.!

Мин һеззең язган хатыгызга
җавап итеп атаем Куломбаев
Вашулла Фазыл улының биографиясен
язам.

Куломбаев Вашулла Фазыл улы
1881 елның 16 сы августында, Красно-
уфимск районы, Елем-Каран авыл советы,
Акъ-куль авылында, ярлы крәстиян
семьясында туган. Авылда йәшәү шарт-
лары насар булганлыктан Фазыл олатай
эш эзләп читкә киткән һәм Айтын прииска-
ларына барып эшкә урнашканга. Семьясы-
рында атаемнан башка Хәким
исемле кешене һәм бер кыз туганы
була. (Улар икесе дә 1922 елда хаера
җидемиштә тыкъытында үлеп калалар).
Атаем Вашулла үсмер булып кына
калгандагы олаучылык аерым бәйләп
Хәзисә олаучылык аерым сәбәпле
Фазыл олатай авылга кайтарга мәҗ-
бүр була. Кайткас күп тә тормый
Хәзисә олагачы үлеп китә, ә бала

249 -2-

йәтим кала. Әзерәк үсә төшкәс үгәй
инәй кулында яшәү шарты авырлаш-
канга үсмер Вашулла Бакрак авылына
... байга эшкә керә, һәм унда бер аз вакыт
...усы булып эшләй. Елем-Каран бала-
...арган сактарында үзе кеүек ярлы
...алган Мәхмүт Гадури һәм
...әзретдин җиген егетләр
...н Кыйшкы мәдрәсә-
...сә кайтадылар.
...вендә укыганда улар
...әүдәсә (арифметика)
...һәм шуның
...
... Златоустка
...ына барып
...м итә. Һәм

-3-

... Мәхмүт Гадури, Максютов
... Златоуска барып алтын
... эшкә урнашалар.
... Мәшһүр Златоус шул инде,
... шунда әзән," — тип
... торган ике атаем.
... сөйләп бәдала

Хөрмәтле Мөнирә Вәлиулловна!

СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында сәсәндәр ижады өйрәнелә. Беҙгә һеҙҙең атайығыҙ Вәлиулла Ҡоломбәтовтың да сәсән булғанлығы, йәғни үҙ ваҡытында бик яратып башҡорт халҡының ауыҙ-тел әҫәрҙәрен йыйғанлығы һәм үҙе лә әкиәттәр, йырҙар, шиғырҙар яҙғанлығы билдәле. Институтта һаҡланған ҡульяҙмаларынан һайлап алып, уның ҡайһы бер әҫәрҙәрен беҙ сәсәндәр ижадына арналған китапта баҫтырып сығарырға әҙерләнәбеҙ. Ләкин беҙҙә уның тормошо, ҡайҙарҙа эшләүе тураһында биографик мәғлүмәттәр юҡ. Һеҙгә үтенес тә шул:

I/ Беҙгә атайығыҙҙың биографияһын яҙып ебәрһәгеҙ ине.

2/ Фоторәсеме лә кәрәк буласаҡ. Һеҙҙә барҙыр бит инде ул. Уныһын институтта күсертеп алғас, һеҙгә кире ҡайтарырбыҙ.

3/ Һеҙҙә атайығыҙҙың ҡульяҙмалары һаҡланмаймы? Булһа ҡалһа, уларын да беҙгә ебәрһәгеҙ ине.

Яуабығыҙҙы оҙаҡлатмауығыҙҙы һорап һәм һеҙгә сәләмәтлек һәм тормош шатлыҡтары теләп, ҡайнар сәләм менән:

Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының өлкән ғилми сотрудниге Н.Т.Зарипов

I6 I 1980

Беҙҙең адрес:

Уфа, 54 (450054)

Проспект Октяб., 71.
ИИЯЛ.



# Атайым тураһында бер кәлимә һүҙ

Атайым Вәлиулла Ҡоломбәтов ярлы ғаиләлә нужа күреп үҫә. Үҫмер ҡорона еткәс, уҡыу-һанауға һәләтен күреп, Баҡрәк ауылы лавкасыһы уны үҙенә эшкә ала. Атайым бында ла үҙен намыҫлы, иғтибарлы һәм итәғәтле кеше итеп таныта. Ошо хужаһы менән Ерем-Ҡарап баҙарына бара торған булғандар. Шунда атайым Мәжит Ғафури һәм Бәҙретдин Мәҡсүтов ағайҙар менән таныша. Өсөһө лә йәтим була. Үҙ-ара һөйләшеп, Ҡыйышҡы мәҙрәсәһенә уҡырға китәләр. Унда, тормош өсөн һиндәсә (арифметика) бик кәрәк, тип талап итә башлайҙар. Хәлфәләр, был егеттәр дингә ҡаршы фән талап итә, тип уларҙы мәҙрәсәнән ҡыуалар. Былар аптырап ҡалмай, өсәүләшеп оҙон юлға — Троицкиға сығып китәләр. Уҡырға инәләр. Ишандарҙың дингә кәрәгенән артыҡ уҡытыуына йәне көйөп, М. Ғафури улар тураһында сатирик шиғыр яҙа. Ошоноң шауҡымы менән өсәүһе лә Троицк мәҙрәсәһенән дә ҡыуылалар. Аҡсалары бөтә. Нишләргә? Егеттәр, бер аҙ баш ватҡас, Златоустҡа алтын йыуырға китәләр. Аҡса эшләгәс, Өфөгә килеп, «Ғалия» мәҙрәсәһенә уҡырға инәләр. Уны 1910 йылда тамамлайҙар. Атайым яҡшы билдәләренә генә уҡый. Шуға ла уны Үзбәкстанға дин әһелдәре башлығы итеп ебәрергә булалар. Ләкин атайым баш тарта. «Мин тыуған илемде ташламайым. Үҙ милләтемә, халҡыма аң-белем бирәсәкмен. Ауылыма ҡайтып мәктәп (мәҙрәсә) асам», — тип әйтә ул. Һәм шулай эшләй ҙә. Дуҫы М. Ғафури яҙыусылыҡ юлы менән китә. Ә Бәҙретдин Мәҡсүтов ағай Монголия яғына юллана. Шунда, өйләнеп, донъя көтә. Олоғая төшкәс, Ерем-Ҡарапҡа ҡайтып, башланғыс кластарҙа уҡытыусы булып эшләй.

Ә атайым Яҡтыкүлгә ҡайтып (3 урамдан торған ҙур ғына ауыл була), башланғыс мәктәп асып ебәрә. Бер үҙе 4 класты уҡыта.

Мин дә атайымда уҡыным. «Әфтиәк ятлап ҡына донъя көтөп булмай, фән кәрәк», — тип ул арифметика, рус теле индерҙе.

Совет власы урынлашҡас, атайымды Ҡыҙыл Армия сафына алалар. Тиҙҙән ул Өфөнән кире ҡайтып төшә. В. И. Лениндың: «Уҡымышлы кешеләрҙе һалдатҡа алмаҫҡа, ундайҙар етәксе органдарға кәрәк», — тигән указы була. Ошо указ нигеҙендә, ауылға ҡайтыу менән, уны Стәрлегә облоноға (өлкә мәғариф бүлегенә — ред.) саҡыртып алалар. Шулай итеп ошонда эшләй башлай. Был хаҡта дәлилләүсе приказ күсермәһе әле тарих, тел һәм әҙәбиәт институты архивында һаҡлана.

Яҙыусы Фарит Исәнғолов иҫән сағында атайым тураһында шулай тигәйне: «Вәлиулла ағай революционер булған, бәлки, яҙыусы булып та китер ине. Ләкин ул Яҡтыкүл ауылының беренсе уҡытыусыһы булыуҙы, халыҡҡа аң-белем биреүҙе өҫтөнөрәк күргән. Вәлиулла Ҡоломбәтов үҙ дәүеренең юғары белемле педагогы, күренекле мәғрифәтсеһе булған».

Ошо фекергә өҫтәп, тағы шуны әйтергә кәрәк: атайым ысын мәғәнәһендә үҙ милләтенең патриоты булды. Бәхет, байлыҡ эҙләп бер ҙә Үзбәкстан яғына сығып китмәгән, тыуған илен ташламаған. Уның ҡарауы, үҙ милләте балаларын уҡытып, кеше итеүгә күп көс һала. Юҡҡамы ни Яҡтыкүлдән уҡымышлы бик күп кадрҙар үҫеп сыҡты.

Ҡыҫҡаһы, атайымдың [illegible] бик күп йәштәр юғары белемгә эйә булды. Ә олоғая төшкәс, уны ҡортсолоҡ фермаһына мөдир итеп ҡуйҙылар. Ә колхоздың ҡортсолоҡ фермаһы Ибраһим ауылы эргәһендә, Мәғаш тауы итәгендә урынлашҡайны. Ат менән шунда йөрөп эшләне атайым.

Ғүмере буйы намыҫлы, иғтибарлы, итәғәтле һәм йор һүҙле кеше, яҡын-тирәлә халыҡтың иң олҡан кәңәшсеһе ине ул. Халыҡ сәсәне 83 йәшкә етеп вафат булды һәм үҙ ауылында ерләнде.

**Мөнирә ҠОЛОМБӘТОВА.**
**Стәрлетамаҡ ҡалаһы.**

# УҠЫМАҒАН ҒӘМҺЕҘ



нан

## Башҡорт халыҡ сәсәне Вәлиулла

Халҡыбыҙҙың онотолған шәхестәре байтаҡ. Һуңғы йылдарҙа ғына Зәки Вәлиди, Муса Мортазин кеүек аҫыл ир-уҙамандарҙың яҡты исемдәрен кире яҡтылыҡҡа сығарҙыҡ. Шундай «онотолған» шәхестәрҙең береһе — яҡташыбыҙ Вәлиулла Фазулла улы Ҡолимбәтов. Ул 1881 йылдың 30 июлендә Яҡтыкүл ауылында ярлы крәҫтиән ғаиләһендә тыуа. Әсәһе иртә донъя ҡуя. Үгәй әсәй ҡыйырһытыуҙары һөҙөмтәһендә атаһының Архангель районында йәшәүсе туғандарында тәрбиәләнә. Үҫмер ҙорона еткәс, халыҡ араһында һәләтле, аҡыллы булыуы менән танылып өлгөрә.

Вәлиулла үҫмер сағында күрше Ерем-Ҡаран ауылы баҙарында Мәжит Ғафури менән таныша һәм улар тора-бара дуҫлашып китә. Тиҙҙән ике егет бергәләп Ҡыйышҡы мәҙрәсәһенә уҡырға сығып китә. Һуңынан улар Троицк, «Ғәлиә» мәҙрәсәләрендә белем ала. Артабан Вәлиулла Ҡолимбәтов тыуған яҡтарына ҡайтып, мәҙрәсә асып ебәрә, балалар уҡыта, алтын приискыларында эшләй.

Мәжит Ғафури менән аралашып йәшәү Вәлиулла Ҡолимбәтовтың ижадына ла йоғонто яһай. Ҡорҙашына бағышлап, ул:

**Халыҡ өсөн ҡиммәте ҙур**
**И, шиғырым, яҙғаның.**
**Әл дә сыҡмай бер**
**исемдән**
**Шунда алтын ҡаҙғаның, —**

тип яҙа.

Вәлиулла Ҡолимбәтов шиғырҙарында халыҡты мәғрифәткә, уҡыуға, белем алыуға өндәү мотивтары өҫтөнлөк итә. («Уҡымаҡ кәрәк», «Тырышлыҡ», «Балаларға нәсихәттәр» һ. б.). Уның күп кенә шиғырҙары йәш быуынға мөрәжәғәт формаһында яҙылған. («Батыр егеткә», «Ингәшкә» һ. б.). Автор уларҙы тоғро булырға, ҡыйыу батыр һәм иң мөһиме — аҡыллы булырға саҡыра. Быларға ирешеү өсөн ололар һүҙен тыңлау һәм тырышып уҡыу кәрәклеген әйтә.

Төрмош һәм эшмыш тураһында уйланыуға арналған («Уфтаныу», «Бай менән фәҡир», «Юл йөрөгәндә») шиғырҙарында шағир тормоштоң ҡатмарлы ҡаршылыҡтарын тәнҡитләргә тырыша. Ләкин синфи ҡаршылыҡтарҙың социаль айырмаһына төшөнөп етә алмауы арҡаһында төшөнкөлөккә бирелеү һәм үкенеү мотивтары ла күҙәлей икән ҡына беләп алғаны күренә («Уфтаныу», «Һибәтулла Сәләхәтина әйҙере», «Һағыныу» һ. б.). «Ирәп булмай», «Ғиләүә» кеүек шиғырҙарында үҙ ғүмеренә фәлсәфәүи баһа бирергә ынтылыш һиҙелә.

## ЯҠТЫКҮЛДЕҢ АҪЫЛ УЛЫ

Вәлиулла Ҡолимбәтов революциянан һуң да балалар уҡыта. Һуңынан колхоз төҙөүҙә ҡатнаша, ҡартайып үлгәнсе колхоз ағзаһы булып тора.

В. Ф. Ҡолимбәтов ғүмере буйы халыҡ ижадын, уның ғөрөф-ғәҙәттәрен, йолаларын менән ҡыҙыҡһынған, ишеткән-күргәндәрен яҙып ала барған. Ҡобайырҙар, әкиәттәр, легендалар, йырҙар, мәҡәлдәр, йола фольклоры, ҡыҙыҡлы тарихи һәм этнографик материалдар, Салауат Юлаев ижадына ҡағылышлы шиғырҙар, йырҙар һәм легендалар, Аҡмулла шиғырҙары, дуҫы Мәжит Ғафури тураһында иҫтәлектәр һәм үҙе ижад иткән әҫәрҙәре теркәлгән дәфтәрҙәр бөгөнгө көндә Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты архивында һаҡлана.

Бер һүҙ менән әйткәндә, башҡорт халыҡ сәсәне Вәлиулла Ҡолимбәтовтың ижад емештәре ярайһы уҡ бай, иң мөһиме — уның тырышлығы арҡаһында халыҡ ижадының байтаҡ аҫыл ынйылары туплалып ҡалған. Ошо хеҙмәте генә лә уның мәртәбәһен бермә-бер үҫтерә.

Бөгөн үкенес менән шуны ла әйтеп үтмәү мөмкин түгел. Халыҡ сәсәненең тыуыуына 100 йыл тулыуҙы республика кимәлендә лә, хатта районда ла билдәләмәнеләр. Ни өсөн? Сөнки был шәхескә заманында тейешле әһәмиәт бирелмәне. Һуңлап булһа ла, исмаһам, быйыл башҡорт халыҡ сәсәне, фольклорсы, мәғрифәтсе, М. Ғафуриҙың дуҫы, замандашы Вәлиулла Ҡолимбәтовтың тыуыуына 110 йыл тулыуҙы билдәләп үтеүҙе кәрәк тип таптыҡ. Мәғлүм булыуынса 11 июлдә Ибраһим мәрәсиме йортонда уның иҫтәлегенә бағышланған сәсәндәр бәйгеһе уҙғарылды. Ә бөгөн Яҡтыкүлдә яҡты исемле халыҡ сәсәненең ҡәбер ташына республика һәм район [illegible] сәсәндәре ихтирам йөҙөнән тере сәскәләр һала.

**Ниаз СӘЛИМОВ.**



# Балаларға нәсихәттәр

1.

Балам, һиңә һүҙем шул,
Уҡып эштәргә өйрән.
Тырышып уҡып, белемле
бул,
Белемһеҙлектән ерән.
Тырышып уҡы һин, балам.
Белемең булһын тәрән.
Төрлө эштәр башҡарырһың
Төрлө һөнәргә өйрән.

2.

Балам, дәресең иҫтә тот,
Бушҡа урам буйлама.
Китабыңды ташлама,
Маъмай менән уйнама.
Бысратма кейемеңде,
Һәм дә аяҡ-ҡулыңды.
Таҙа йөрөт үҙеңде,
Дөрөҫ һөйлә һүҙеңде.
Һаулыҡ һорап ҡартынан,
Оҙатып ҡал артынан.

3.

Яҡшы булған балалар,
Инсафлы йөрөр улар.
Тәртип һаҡлар һәр ваҡыт
Әҙәпле булыр улар.
Бәләкәскә ҡул бирер.
Ололарға юл бирер.
Ата-әсәнең теләге
Һәм терәге шул булыр.